

***Рамазан ҮТӘҒОЛОВ,***
***крайҙы өйрәнеүсе***

# БАЙМАҠТАР БАШҠОРТ КАВАЛЕРИЯ ДИВИЗИЯҺЫНДА

*Как всякое истиннно народное дело, история народной дивизии была проста и величественна. Башкирский народ захотел создать свою национальную дивизию из своих людей, своим иждивением, своими руками. Сталин удовлетворил народную просьбу.*

К.Симонов.

Данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙәренең ҡаһарманлығы халҡыбыҙ хәтерендә һәр саҡ һаҡлана. Ғөмүмән, башҡорт халҡы элек-электән илгә хәүеф янағанда яуға дәррәү күтәрелгән.

1812 йылғы Ватан һуғышында 32 башҡорт полкы төҙөлгән, шуның 14-се һәм 15-се полктары 6-сы Башҡорт кантоны яугирҙәренән торған. Улар рус армияһы менән берлектә беренселәр булып 1814 йылда Парижға барып ингәндәр. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 108 кеше ”За взятие Парижа 14 марта 1814 г.”, ”В память войны 1812 года” миҙалдары менән бүләкләнгән. Рус яҙыусыһы В.Кудряшев был турала: ”Друзья! Гордитесь: целый мир узнает, сколь могуч башкир!” — тип яҙҙы.

Граждандар һуғышы осоронда төбәктәге башҡорттар Башҡорт автономияһын яҡлап легендар полководец Муса Мортазин етәкселегендәге Башҡорт полкында хеҙмәт иткән. Һуғыштағы батырлыҡтары өсөн яҡташтарыбыҙ Ш.Ғафаров (ике тапҡыр), Ш.Мансуров, З.Ҡаҙнабаев, Ф.Ибраһимов Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланғандар. Барлыҡ һуғыштарҙа ла баймаҡтар алдынғы сафта булды.

Гитлер фашистары 1941 йыл илебеҙгә ҡаршы һуғыш башлағас та, башҡорт халҡы, атай-олатайҙарыбыҙҙың хәрби традицияларын дауам итеп, үҙенең кавалерия дивизияһын төҙөгән. Атлы ғәскәр төҙөүҙе һорап, баймаҡтар беренселәрҙән булып партия һәм хөкүмәт етәкселәренә

мөрәжәғәт менән сығыш яһаған. Был тәкдим республика хеҙмәтсәндәре араһында ла яҡлау таба. Тиҙҙән Мәскәүҙән ыңғай яуап алына. СССР Дәүләт оборона комитеты телеграммаһында: ”Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы хеҙмәтсәндәренең теләген хуплап, Дәүләт оборона комитеты республика территорияһында тиҙ арала ике Башҡорт кавалерия дивизияһын төҙөргә рөхсәт итә”, — тиелә. 1941 йылдың 18 ноябрендә ВКП(б) Өлкә комитеты һәм БАССР Халыҡ комиссарҙары Советы Башҡорт атлылар дивизиялары төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә. Республика ойоштороу комиссияһы төҙөлә. Шундай уҡ комиссиялар ҡала һәм райондарҙа ла эш башлай.

Баймаҡ районы халҡы ла ошо дивизияны төҙөү эшенә әүҙем ҡушыла. Элекке уҡытыусы, район мәғариф бүлеге мөдире, өлкән лейтенант Бәҙри Мәмбәтҡолов республика комиссияһы составына индерелә, ә ВКП(б)-ның Баймаҡ район комитеты секретары Мөбәрәк Нәзиров дивизия комиссары итеп тәғәйенләнә. Башҡорт атлылар дивизияһына доброволец итеп ебәреүҙәрен һораған ғаризалар Баймаҡ хәрби комиссариатына бик күп килә. Бына уларҙың бер нисәһе. ”Мине Башҡорт кавалерия дивизияһына алыуығыҙҙы һорайым. Мин йөрәгебеҙгә ҡан һәм ғүмеребеҙгә дан биргән илебеҙ азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн үҙ-үҙемде аямай, арымай-талмай һуғышырға һүҙ бирәм!” — тип яҙа Баймаҡ егете Ибраһим Әбсәләмов. Беренсе Этҡол мәктәбе директоры, уҡытыусы Исхаҡ Йәнбәковтың ғаризаһында: ”Мин доброволец булып фин һуғышында ҡатнаштым. Минең тәжрибәм бар. Илебеҙ ҡурҡыныс аҫтында торғанда, мин тыныс ята алмайым”, — тип әйтелә.

Бына ошондай патриот ир-егеттәрҙән төҙөлә лә инде 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы. Ул тәүҙә доброволецтарҙан торған дивизия булып һанала. Урындарға ебәрелгән күрһәтмәләрҙә: ”Башҡорт атлылар дивизияһына партия эшенә мөкиббән бирелгән, һуңғы тамсы ҡанына ҡәҙәр илде яҡлап һуғышырға әҙерлекле һәм дошманды еңеүгә ышаныслы һәм ныҡлы кешеләрҙе һайлап алырға. Урындарҙа дивизияны тулы снаряжение менән тәьмин итеү, кейендереү һәм ашатыу сығымдарын хәл итергә”, — тиелә.

Баймаҡта ойоштороу эштәре 1941 йылдың декабрь башында тамамланып, 9-10 декабрҙә 300-гә яҡын кеше Дим станцияһына юл ала. ”Райондан бөтәһе 700-гә яҡын кеше башҡорт атлылары сафында һуғыш сынығыуын үтте,” — тип хәтерләр ине дивизия ветераны Бәҙри Мәмбәтҡолов.

Баймаҡтар дивизияны ойоштороуҙа ҡатнашып ҡына ҡалманылар, матди ярҙам да күрһәттеләр. Яҙыусы-журналист Ә.Ихсан: ”Баймаҡ хеҙмәтсәндәре һалдаттарҙы кейендерҙе, ашатты һәм кәрәкле хәрби снаряжение (сана, арба) һәм аттар менән тәьмин итте. Баймаҡтар Башҡорт атлы дивизияһына 46-сы конезаводта үҫтерелгән 400-ҙән ашыу РККА аттарын

ебәрҙе. Баймаҡтан дивизия комиссары өсөн Киквук ҡушаматлы ат менән бергә, команда составына 500 тун ебәрелде", — тип яҙҙы. Дивизия командиры Миңлеғәли Шайморатов Баймаҡ районы етәкселәренә яҙған хатында: "112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына аттар һәм башҡа бүләктәр ебәреүегеҙ өсөн ҙур рәхмәтлебеҙ. Беҙҙең дивизия халыҡ ышанысын аҡлар һәм дошманды ҡыйратыр өсөн бөтөн көсөн һалыр", — тип белдерә.

Дивизия составында Баймаҡ атлылары һуғыштың башынан аҙағына хәтлем ҡатнашып, данлы яу юлы үтә. "Ҡыҙыл Баймаҡ" гәзитенең 1943 йылдың 5-се һанында: "Башҡорт атлылар дивизияһында баймаҡтар күп. Улар үҙҙәрен батыр һәм ҡурҡыу белмәй торған һуғышсылар итеп күрһәтә һәм Совет илен гитлеризмдан азат итеү өсөн көстәрен йәлләмәй. Унлап һалдат хәрби наградаларға тәҡдим ителде. Һуғыш ваҡытында бигерәк тә полк батареяһы наводчигы Йәнбәков Исхаҡ үҙен батыр һуғышсы итеп күрһәтте. Ул, артиллериянан тәҙ атып, немецтарҙы ҡырҙы һәм үҙе батыр үлеме менән һәләк булды. Үлгәс, ул хөкүмәт наградаһына тәҡдим ителде. Йәнбәков бик тәртипле һалдат булып һаналды. Ул шул ваҡытта политрук ярҙамсыһы булып эшләне", — тип яҙыла фронт-таш иптәштәре район хеҙмәтсәндәренә ебәргән хатта.

Фронттан яҙылған икенсе бер хатта ошондай юлдар бар: "Район мәғариф бүлегенең элекке мөдире, хәҙер эскадрон командиры өлкән лейтенант Мәмбәтҡолов Бәҙри дивизияла маҡтау менән телгә алынған бер командирға әйләнде.  Ул үҙ эскадронының боецтары араһында батырлыҡ һәм тәртиплектә өлгө булып тора. Боевой хәрәкәттәрҙә эскадрондың башында бара. Полк командиры Т.Кусимов" ("Ҡыҙыл Башҡортостан", 1943 йылдың 3-сө һаны). Бәҙри Мәмбәтҡолов һуғыш-та күрһәткән батырлыҡтары өсөн өс Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, "Батыр-лыҡ өсөн" миҙалы менән наградлана.

Полк командиры Таһир Кусимов "Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзитенең шул уҡ һанында: "Баймаҡ районы Ғүмәр ауылынан Үҙәнбаев Фәхрис-лам үҙенең минометы менән дошмандың автомашинаһын, 2 взводҡа яҡын һалдатын һәм офицерын юҡ итте", — тип яҙа.

Ә.Ихсандың "Саҡма тояҡ аттарҙа" исемле китабында ла күп кенә яугир баймаҡтар маҡтап телгә алына: "Улар араһынан өлкән сер-жант, элемтәсе Ғәлиәхмәт Сәйфуллин (Ғәҙелбай ауылы), артилле-рист Мөхтәр Ғәйетбаев (Буранбай ауылы), Фаиз Таһиров, Исмәғил Әбуталипов (Темәс ауылы) батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ор-дены, ә Миңлеғол Арыҫланов (Темәс) һәм элемтәсе Рәшит Йосопов Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнәләр. Улар һуғыштың башы-нан аҙағына хәтлем булдылар. Һуғышсыларға дәрт биреп, Г.Сарба-ев, Б.Вәлиев һуғыштан ялға сыҡҡанда ҡурай уйнанылар. Т.Кусимов полкынан сержант, Күсей ауылы егете Тәфтиҙән Миңлеғолов үҙенең

отделениеһы менән беренселәрҙән булып Днепр йылғаһын кисеп сыҡты (1943 й., сентябрь айы) һәм башҡалар сыҡҡанға ҡәҙәр оборона тотто. Улар бер нисә миномет позицияһын юҡ итте һәм егерменән ашыу немецты ҡырҙы. Ул ошо һуғышта геройҙарса һуғышып һәләк булды. Т.Миңлеғоловҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелде".

Былдай батырлыҡ өлгөләрен күпләп килтерергә мөмкин. Политрук Рәхим Сагуманов, өлкән лейтенант Ҡазыхан Асылбаев, ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, һуғыш яланында ятып ҡалды. Ҡыҙылармеец Мотаһар Ғәлин бер атакала ғына 12 фашисты юҡ итә.

Баймаҡтар һуғышта һынатманы. Әммә Еңеү юлдары еңел булманы. Асылда, Башҡорт кавалерия дивизияһына яҡшы ҡоралланған дошман менән алышырға тура килде, фашист танктарына ҡаршы көрәшеү өсөн һәм самолеттарынан һаҡланырлыҡ артиллерия булмауы атлылар дивизияһының көсөн кәметте, тип хәтерләй ветерандар.

Һуғыш ветераны, өлкән сержант Ғәлиәхмәт Сәйфуллин: "Дивизияға 1942 йылдың декабрь айында Дон йылғаһын аша сығырға приказ килде. Ләкин дошман ныҡ оборона тотто, сөнки бынан Сталинградҡа табан стратегик юл үтә ине. Дошман өҙлөкһөҙ рәүештә артиллериянан атып, самолеттарҙан бомба яуҙырҙы. Беҙ, һыбайлылар, атакаға күтәрелдек. Беҙҙә бер танк та, һауа һөжүменән һаҡлаусы көс тә булманы. Был алышта 1 меңгә яҡын кешебеҙ һәм яҡынса 1500 ат ятып ҡалды", — тип хәтерләй. Ниндәй әсенеүле хәл. Ошондай сәбәптәр атлылар дивизияһын ҙур фажиғәгә килтерә. 1943 йылдың февралендә башҡорт атлыларының рейдҡа ебәрелеүе һәм дивизияның ҡамауҙа ҡалыуында кем ғәйепле? Бында дивизияның бөтөнләйгә хәрби припасһыҙ һәм аҙыҡтүлекһеҙ ҡалыуын һәм 3-сө гвардия армияһы командованиеһының ышандырып та ярҙамға килмәүен тарих нисек кисерер икән? Күпме аҫыл ирҙәрҙең, шул иҫәптән дивизия командиры генерал Шайморатовтың фажиғәле һәләк булыуы ҡыҙғаныс хәл. Быға хәтлем был дөрөҫлөк халыҡтан йәшереп киленде.

Рейдтан Баҡый Вәлиев (Таулыҡай ауылынан), 13 һалдат менән берлектә, полктың Ҡыҙыл байрағын тотоп сыға. Был батырлыҡ һәм хәрби антҡа тоғролоҡ билдәһе. Ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә.

1943 йылдың йәйендә башҡорт яугирҙәре менән осрашыу өсөн дивизияға Башҡортостан делегацияһы килә, унда яҡташ артистарыбыҙ Ғата Сөләймәнов һәм Мөхәммәт Иҙрисов була. Улар Баймаҡ хеҙмәтсәндәре исеменән яугирҙәргә сәләм һәм бүләктәр тапшыра. Башҡортостан делегацияһының килеүе башҡорт атлыларына рухи көс һәм дәрт өҫтәй.

Баймаҡтар артабанғы һуғыштарҙа ла үҙҙәрен батыр һуғышсылар итеп күрһәтте. Көнсығыш Белоруссияны азат иткән һуғыштарҙа күрһәткән

батырлыҡтары өсөн Сибай егете өлкән сержант Сөләймән Дәүләтов Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

1945 йылда башҡорт атлылары һуғышты Эльбала, Премниц ҡалаһында тамамлай.

Уның алдынан 1 май көнө улар Бранденбург еренә барып инә һәм унда концлагерҙан меңдән ашыу тотҡондо әсирлектән сығара. Уларҙың башҡорт атлыларына рәхмәттәре күп булды. Ошо акцияла өлкән сержант Ғәлиәхмәт Сәйфуллин ҡатнаша. Ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнгән.

Башҡорт атлылары Бөйөк Еңеүгә үҙҙәренең тос өлөшөн индерҙе. Дивизияның 78 яугире Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды. Күптәре орден һәм миҙалдар менән наградланған. Дивизияға гвардия, Чернигов исемдәре бирелгән, Ленин һәм Ҡыҙыл Байраҡ, II дәрәжә Кутузов, Суворов ордендары менән бүләкләнгән.

Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Элекке дивизия ветераны Б.Мәмбәтҡолов, Баймаҡтан Башҡорт кавалерия дивизияһына 700-гә яҡын кеше китеп, һуғыштан 300-гә яҡыны ғына кире әйләнеп ҡайтты, тип хәтерләй ине. Ҡәһәрле һуғыш тамамланыуға алтмыш йыл, ләкин уның михнәтле юлдары бер ҙә онотолорлоҡ түгел.

Дивизия ветерандары һуғыштан һуң да үҙҙәрен һынатманы. Ҡайҙа ауыр — шунда эшләнеләр, хеҙмәт алдынғылары булдылар. Элекке эскадрон политругы Әмирхан Абанов яуаплы эштәрҙә эшләне, уның һуғышта алған ике Ҡыҙыл Йондоҙ, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендарына ”Почет билдәһе” ордены ҡушылды.

Элекке эскадрон командиры, өлкән лейтенант Б.Мәмбәтҡолов оҙаҡ йылдар мәктәптә уҡытыусы булып эшләне, шулай уҡ Түбә урта мәктәбендә, Сибай педагогия училищеһында директор вазифаһын башҡарҙы. Ул Ленин ордены, Ушинский миҙалы, РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Баймаҡ һәм Сибай ҡалаларының почетлы гражданы исемдәренә лайыҡ булды.

Гвардияның өлкән сержанты Сәйфуллин Ғәлиәхмәт ”Кубань” колхозында рәйес булып эшләп, ваҡытында хужалыҡты алдынғылар рәтенә сығарҙы. Баймаҡ Башҡорт драма театры артисы Ғәйфи Сарбаевҡа ”РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы” маҡтаулы исеме бирелде. Макулов Төхфәт Сибайҙа беренселәрҙән булып профессиональ белем биреү училищеһы ойоштороп, уның директоры булып эшләне. Абдулла Сәғитов, Әхмәҙулла Сырлыбаев совет, хужалыҡ эшендә яуаплы вазифалар биләне. Темәстән Исмәғил Әбуталипов, Миңлеғәле Арыҫланов хеҙмәт алдынғылары булдылар.

Башҡорт кавалерия дивизияһы ветерандары сафы йылдан-йыл һирәгәйә. Уларҙың ил алдында күрһәткән батырлыҡтары халыҡ хәтерендә, исемдәре тарих битендә мәңге һаҡланасаҡ.